

5-се аҙым – уҡыусылар күнекмәләрҙе эшләй



6-сы аҙым – уҡыусыларҙың статистикаһын күҙәтеү

– дәрестә компьютер технологияһын ҡулланыу хис-тойғоға ла йоғонто яһай, мәғлүмәтте тулыраҡ һәм нығыраҡ үҙләштереү мөмкинлеген бирә;

– уҡыусыларҙың туған тел дәрестәренә ҡыҙыҡһыныуын арттыра.

Рефлексия. Бөгөнгө оҫталыҡ дәресенән файҙа алдығыҙмы? Learning Apps программаһы оҡшанымы?

Диалогик тренажёрҙар – тел өйрәнеү тиҙлеген арттырыу сараһы

И.Ш. СӘХӘБҮТДИНОВА,
Октябрьский ҡалаһының 11-се татар гимназияһы уҡытыусыһы

Беҙ яңыса фекерләүгә ҙур иғтибар бирелгән тормошта, әленән-әле яңы асыштар яһала торған осорҙа йәшәйбеҙ. Заманса фекерләргә ынтылған уҡытыусы ғына уҡыусыһын үҙ фекере, баһаһы, үҙенә генә хас тормош тәжрибәһе, ижади һәләткә эйә булған шәхес итеп тәрбиәләй ала.

Бөгөн һәр яҡлап камил булған шәхес тәрбиәләү – төп бурысыбыҙ. Был бурыс төрлөсә тормошҡа ашырыла. Шуға күрә һәр уҡытыусы, ФДББС-на ярашлы, заман технологияларын ҡулланып эш итергә тейеш.

Уҡытыу системаһында төрлө педагогик технологияларға таянып эшләү мөмкинлектәре булдырылған. Атап әйткәндә, электрон тренажёрҙар ҡулланыу актуаль методик алым иҫәпләнә. Уҡытыу методикаһы булараҡ, был алым үҙ-ара бәйләнештә булған түбәндәге диагностик, белем биреү һәм тәрбиәүи функцияларҙы башҡара.

Тренажёрҙарҙы дәрестең төрлө этабында ҡулланырға була. Шулай уҡ улар дәрестән тыш та, үҙ аллы эшләгәндә лә уҡыусыларҙың теоретик һәм практик белем һәм күнекмәләрен булдырыуҙа ҙур роль уйнай. Ғөмүмән, белем биреү процесына һиҙелерлек йоғонто яһай, йәғни белем үҙләштереү тиҙлеген арттыра, материалдарҙы аңлы һәм тәрән үҙләштереүгә булышлыҡ итә.

Мин туған телгә өйрәтеү дәрестәрендә диалогик тренажёрҙарҙы киң ҡулланам. Улар бигерәк тә башланғыс кластарҙа бәйләнешле телмәр үҫтереүҙә, йәғни диалог төҙөргә өйрәтеүҙә уңайлы. Был эш диалог төҙөү һәм уларҙы аңлау этаптарынан тора. Шуға күрә күнегеүҙәр системаһын һорау-яуапҡа ғына ҡайтарып ҡалдырырға ярамай. Уҡыусы балалар диалог аша үҙ-ара фекер алыша белергә тейеш.

Диалогик тренажёрҙар балаларҙың телмәрен үҫтереүҙә педагогик ҡорал булып тора. Ул оҡшатып һөйләүгә ҡаратылған төрлө әңгәмәләр нигеҙендә уҡыусыны һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә, лексик берәмектәрҙе үҙләштерергә, коммуникатив аралашыу күнекмәләрен булдырырға ярҙам итә. Мәҫәлән, дәрестәрҙә “магазин” тигән тренажёр уҡыусыларға һатыусы һәм һатып алыусы ролендә булырға, шулай уҡ аралашыу культураһына өйрәтә. Был үҙ сиратында тәрбиә сараһы булып та хеҙмәт итә. Был тренажёр уҡыусыларҙы ашамлыҡтарҙың атамаларын *(һөт, икмәк, алма, май)* үҙләштерергә, дөрөҫ итеп һорау ҡуйырға *(нимә кәрәк? нисәү? ниндәй?)* булышлыҡ итә, ғөмүмән, коммуникатив аралашыуҙы формалаштыра.

Уҡытыу процесында тренажёрҙарҙы уҡыусыларҙың белем кимәлен күҙҙә тотоп төҙөү һәм ҡулланыу зарур. “Китапхана” тренажёрын ҡулланғанда бала бирелгән варианттарҙан әҙер яуапты ғына һайлап ала, ә “Танышыу” диалогында яуапты үҙе уйлап әйтергә тейеш. “Телефондан һөйләшеү” тренажёры һорауҙы ишетеп аңлауға *(аудирование)* ҡаратылған.



Тренажёрҙарҙың тематикаһы уҡыусыларҙың көндәлек тормошо менән байытылған.

Шулай итеп, тренажёрҙар ҡулланыу дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс, зауыҡлы күргәҙмәлелек менән байытып ойоштороу мөмкинлеген бирә. Шулай уҡ ул балаларҙы туған телгә өйрәтеүҙә юғары һөҙөмтәләргә ирешеү юлы ла.